# ОСКОН

Ноябрь, 2018 йыл Осҡондан ялҡын ҡабына



# Тәүге ҡар

Ноябрь. Көн һыуытып тора. Мин түҙемһеҙләнеп декабрҙе көтә башланым. Әҙерәк һыуыҡ ел иҫә. Моғайын, иртәгә ҡар яуыр, тип уйланым. Ысынлап та, иртәнсәк тороп хайран ҡалдым – тирә-яҡ ап-аҡ. Кисә генә ер ҡара ине бит. Тышҡа йүгереп сыҡтым. Һыуыҡ бер нисә тапҡыр битемде семеткеләп алды. Эй, рәхәт... Ләкин төшкөһөн ҡарҙы ҡояш иретә бит тип, ҡарҙы ҙур көрәк менән икенсе урынға өйә башланым. Ынйы бөртөктәре булып яуып торған ҡар бик матур ине. Өйгә инеп барғанда тамсылап торған боҙҙо күреп һындырып алдым да ялай башланым. Сығып Ҡыш бабай әүәләп йөрөгәндә ауырып китмәһәмме! Эй, йүткерәм, сәсәйем, тамағым ауырта. Хәлем бөткән кеүек булғас, өйгә инеп киттем. Әсәйем минең ауырыуымды аңлап, тәмһеҙ дарыуҙарын бирә башланы. Тик минең күңелем һаман тышҡа атлыға ине. Әсәйем эшкә китеү менән, арлы-бирле кейенеп, шәлемде муйынымдан ысҡындырып, тышҡа йүнәлдем. Әллә нисәмә Ҡыш бабай эшләнем. Ҡар ҙа туҡтаны. Мин тағы бер Ҡыш бабай эшләйем тиһәм, урамда ҡар бөткән. Сәғәткә ҡарап, әсәйемдең ҡайтыр ваҡыты етеүен аңлап, йүгереп өйгә инеп киттем. Муйыныма бәйләгән шәлемде таба алмағас, юрғанға уранып, йоҡлағанға һалышып яттым. Әсәйем сәй эсте, минең янылма килмәй. Түҙмәй үҙем янына барып: “Әсәй, ниңә дарыу бирмәйһең?” – тинем. “Ана, тышта ун бер Ҡыш бабайың һине йүнәлтәм тип тәҙрәгә ҡарап ултыра”,–тине ул.

Әлбиттә, әсәйем шаярта ине. Тик ул миңә бик асыуланған. Әсәйҙәр бит балалары өсөн борсола, ә беҙҙең ауырыуыбыҙ улар өсөн бигерәк тә көйөнөслө. Шуны ваҡытында аңламағанмын шул. Боҙ ялап, Ҡыш бабайҙар әүәләгәндән һуң оҙаҡ ҡына ауырып яттым. Эйе, ынйы бөртөктәре булып яуған ҡар матурлығы менән һәр кемде үҙенә тарта шул.

**Мостафина Вилена, 10- сы класс**

## *Мәктәп яңылыҡтары*



“Юл ҡағиҙәләре” байрамы



Әсәйҙәр көнө



Беҙ - волонтерҙар

# *Көҙгө каникулдар*



Көҙ. Ҡояшлы аяҙлы көндәр. Берлек ауылының осонан уҡ башланған урмандар, һарыға мансылып, тыныс ҡына ойоп ултыра.

Күктән инде ҡыр эштәре тамамланған. Баҫыуҙар иген үҫтерен биргәндән һуң, батырҙарса күкрәк киреп ял итә.

Алтын көҙ. Һәр бер кешенең үҙенең эше бар. Кем бура бурай, ә кем аҙбар-һарайын рәтләй. Ә балалар мәктәпкә баралар, мәктәп баҡсаһына алмағастар ултырталар, үҫентеләргә тиреҫ ташыйҙар.

***Лотфуллина Карина, 9-сы класс***

Йоҡоға китәр-китмәҫ кенә ятҡанда, әсәйемдең яғымлы тауышы ишетелде. Ул: "Балам, беренсе ҡар яуа, тороп ҡарайһыңмы?" − тине. Мин һикереп торҙом да тәҙрәгә ҡапландым. Ысынлап та, беренсе ҡар яуа ине. Әле генә һап-һары япраҡтар менән түшәлгән ер өҫтөнә ынйы сәсәгендәй ап-аҡ ҡар бөртөктәре ҡуна. Көҙ менән ҡыш осрашҡандар. Кем кемде еңәр? Ҡар бөртөктәре ниндәйҙер аҡыл етмәҫлек көй аҫтында бейейҙәр, ул көйҙө улар үҙҙәре генә ишетә һымаҡ. Мин дә шулай ер өҫтөндә осоп йөрөр инем. Был ҙур ҡар бөртөктәренән башҡа бер нимә күрмәй икән тип, мин бороном менән быялаға терәлдем. Бер нимә лә күренмәй. Ҡараңғылыҡ. Мин тәҙрә янында уйланып баҫып торҙом: унда – төпһөҙ ҡараңғылыҡ эсендә берәм-һәрәм әле һүнмәгән тәҙрәләр шәйләнә. Ул тәрәҙә артында йәшәүсе кешеләрҙе күҙ алдына килтерҙем. Был ҡышҡы кистә улар нимә эшләйҙәр икән? Шул ваҡытта әсәйем ут яндырҙы һәм мин тәҙрә янынан киттем. Минең ғаиләм үҙ янымда, шуға күрә башка кешеләр тураһында миңә ниңә уйланырға?

Яңы яуған аҡ ҡар бөтөн кешегә лә, минең ғаиләмә лә, аҡ бәхеттәр, күп шатлыҡтар алып килһен ине!

***Фәйзуллина Айгизә, 9-сы класс***

# Рәхмәт һеҙгә, әсәйҙәр!



Ҡәҙерле әсәйҙәр! Һеҙҙе ысын күңелдән байрам менән ҡотлап, сәләмәтлек, оҙон ғүмер, аяҙ күк йөҙө һәм эшегеҙҙә уңыштар, сикһеҙ шатлыҡ- ҡыуаныстар теләп ҡалабыҙ. Әсәләрҙең күңелен ҡайғы-һағыш баҫмаһын, сабыйҙарҙың киләсәге яҡты булһын! Әсәй булыуҙан да юғарыраҡ бәхет, бөйөгөрәк исем юҡтыр ул, шуға күрә һеҙҙең алда баш эйәбеҙ.

***Хөсәйенова Азалия, 5-се класс***

Әсәй! Әсәкәйем! Ниндәй яғымлы һүҙ! Ошо һүҙҙе гел ҡабатлағы килеп тора. Сөнки әсәйҙән дә матурыраҡ, яғымлыраҡ кеше юҡ. Әгәр шатлығыбыҙ булһа ла, ҡайғыбыҙ килеп сыҡҡһа ла гел әсәй менән уртаҡлашабыҙ. Баланың иң тәүге аҙымы ла, һүҙе лә - әсәй һүҙенән башалана ул.

*Иң тәүге һүҙ, яғымлы һүҙ,*
*Тылсымлы һүҙ – ул әсәй,*
*Һәр бер кеше, һәр бер бала,*
*Тик “әсәй” тиеп йәшәй.*

Әсәйҙең һәр һүҙе беҙҙе уйландыра, шатландыра.

Беҙҙең дә ғаиләлә үҙ ҡояшыбыҙ бар. Исеме есеменә тура килеп тора ул әсәйемдең. Алһыу ғына сикәләренә оҡшатып ҡушҡандар тиерһең Алһыу исемен. Ғаиләлә ул һабаҡ бирә, ярамаған эш эшләһәк төҙәтеп ебәрә. Һәр бер аҙымды, һәр бер һүҙҙе иҫләй ул минең әсәйем.

*Нимә бирһәм дә һиңә*
*Бөтәһе лә аҙ кеүек,*
*Әгәр бер һүҙ әйтһәң дә,*
*Иркәләү һәм наҙ кеүек.*

Әсәкәйемдең ҡулдары алтын. Уның күңел һалып бәйләгән кейемдәрен кейһәң, тылсымлы көс һине күктең етенсе ҡатына алып менгән кеүек. Бешергән аштарын тәмләп ҡараһаң, телеңде йоторлоҡ. Нимә бирһәм дә аҙ кеүек һиңә ҡәҙерле, ғәзиз, һөйкөмлө әсәкәйем. Балаларын күҙ ҡараһы кеүек һаҡлай ул һәр бер әсә. Әсәһеҙ донья йәмһеҙ. Гел беҙҙе ҡыуандырып, яҡты нурҙарың менән өйҙө йылытып күңелдәргә илһам өҫтәп тор әсәйем, минең бөтмәҫ шатлығым. Әсә күңеле – далала тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Мин ҙурайһамда гел һин минең эргәмдә буласаҡһың. Ҙурайһамда һинең тылсымлы һүҙҙәреңә, ярҙамыңа мохтаж буласаҡмын. Ҡайҙа ғына йәшәһәмдә, дала ерҙәренә сығып китһәмдә, һинең яғымлы ҡарашың, әйткән аҡылы һүҙҙәрең минең тормошомда маяҡ булып торасаҡ

***Рафгутдинова Регина, 11-се класс***

# Әсәйем - кәҙерлем

Бөтәбеҙ ҙә белә донъяла әсәйҙән дә ҡәҙерлерәк һәм яҡыныраҡ кеше юҡ. Тыуғандан алып, ҡартайған көнөбөҙгә тиклем,ҡайғылы минуттарҙа,шатлыҡлы ваҡыттарҙа,әгәр ҙә күңелдә борсоу йәки башта йөҙ һораүҙар булһа - әсәй һәр ваҡыт эргәлә, ул беҙгә һәр ваҡыт таяныс-терәк була һәм ярҙам итә. Әсәйҙәр беҙҙең турала ғүмер буйына, хатта беҙ ҙурайғас та, хәстәрлек күрә.

Әсәй өсөн үҙ балаһынан башҡа ҡәҙерлерәк һәм яҡшыраҡ бер нимә лә һәм бер кем дә юҡ. Шуның өсөн дә ул үҙенең балаһын хәстәрләй, уның өсөн тулҡынлана һәм ҡайғыра.

Әммә ҡайһы бер ваҡыттарҙа беҙ был һөйөүҙе һәм хәстәрлекте ҡәҙерләмәйбеҙ, үҙебеҙҙе йәнәһе лә ҙур кешеләр итеп һанайбыҙ, әсәй бер нимә лә белмәй һәм аңламай тип уйлайбыҙ. Ул беҙгә ярҙам итергә тырышып, үҙенең кәңәштәрен әйтһә лә, беҙ үҙебеҙсә эшләйбеҙ, һәм аҙаҡтан тағы ла әсәйҙең һүҙҙәренең дөрөҫлөгөнә инанабыҙ. Әсәйҙәр бит һәр ваҡыт дөрөҫ һүҙ әйтәләр, сөнки улар беҙҙән күпкә оло, улар бик күп ауырлыҡтар аша үткәндәр.

Минең әсәйем дә, күп әсәйҙәр кеүек, балаларым тип тырыша, ҡайғыра һәм беҙҙең өсөн өҙөлөп тора. Уның исеме - Милә. Исеме исеменә тап килеп тора уның. Мин әсәйем менән һәр ваҡыт һоҡланам, ғорурланам, унан өлгө алам һәм уның һымаҡ булырға тырышам.

Миңә бик күп таныштарым әсәйенә оҡшағанһың тиҙәр. Ләкин был беренсе ҡарауға ғына шулай күренә.

Әйтәләр бит, күҙ-күңел көҙгөһө тип. Һәм һәр ваҡыт, әсәйемдең һоро-зәңгәр күҙҙәренә ҡарағанда, ошо һүҙҙәргә ышанам. Улар эскерһеҙлек, ихласлыҡ һәм изгелек бөркә, бер ғәҙелһеҙлек етә, уның ҡарашы үткер һәм асыулыға әйләнә. Уның сәстәре ла, ирендәре ла бик матур. Әсәйемдең һәр бер хәрәкәтендә бөхтәлек, нәфислек һәм еңеллек сағыла. Мин уның менән һоҡланып туя алмайым.

Яҡшы әсәй булыуы ныҡ ҡыйын. Бәхеткә күрә, минең өлгө алырлыҡ кешем бар. "Әсәй" тип әйтеү бәхетенә эйә булғаныма мин Хоҙайға мең рәхмәтлемен. Ошонан да яҡшыраҡ бәхет бармы икән был донъяла?!

***Мәүлитова Гүзәл, 9-сы класс***

Баш мөхәррир: Ильясова Г.М. Компьютер версткаһы: Стрижова И.М.
Мөхәрриәт: 5-11 класс уҡыусылары.